*Зөһрә АЛТЫНБАЕВА*

# Йырсы йырҙа дан ала



*Рәүилә Мәсәлимова*

Дим буйы. Халҡыбыҙҙың бихисап йырҙарында данланған, әһәңле тарих биттәрендә лайыҡлы урын биләгән хозур тәбиғәтле Дим йылғаһы. Башҡорт халҡының изге төйәге. Һалҡын һыуы ялҡынлы йөрәктәрҙең ярһыуын баҫыр, моңлоларға моң өҫтәр, моңһоҙҙарҙы моңландырыр йылға. Ошо төбәктән байтаҡ күренекле йырсылар, талантлы шағирҙар, абруйлы шәхестәр сығыуы һис тә осраҡлы түгел. Беҙҙең геройыбыҙ ҙа Дим буйынан.

...Башҡортостан телевидениеһының сираттағы "Гәлсәр һандуғас" тапшырыуы бара. Бына сәхнәгә ҡап-ҡара сәстәрен артҡа тарап үргән, ябай, әммә үҙенә үтә килешеп торған күлдәк кейгән мөләйем ханым килеп сыҡты һәм моңло тауышы менән быға тиклем ишетелмәгән өр-яңы йырҙы йырлай башланы. "Ултыртмағыҙ яңғыҙ ҡайын" тип атала ине ул (Р.Ханнанов көйө, Р.Миңнуллин һүҙҙәре). Йыр тәүге ишетеүҙән үк әсир итте, уйландырҙы, моңландырҙы, күңел түрендә мәңгелеккә урын алды. Һуңынан йырҙың видеоклибын да бер нисә тапҡыр ҡарарға тура килде. Ул ялҡытманы, киреһенсә, башҡа эштәрҙе ҡалдырып тороп, телевизор экранына төбәлергә йәиһә радио эргәһенә яҡыныраҡ килергә мәжбүр итте. Рәүилә Мәсәлимова башҡара ине был йырҙы. Артабан ошо бәйгелә уның башҡарыуында "Ваҡыт" йыры (Х.Мөҙәрисова һүҙҙәре, Б.Йәнекәев көйө) яңғыраны һәм шунда уҡ тамашасының бөтә иғтибарын йәлеп итте, үҙенә арбаны. Аҙаҡ был йыр халыҡ араһында айырыуса популяр булып китте.

"Гәлсәр һандуғас" бәйгеһенең йомғаҡлау өлөшөндә был әһәңле йыр бер юлы өс призға лайыҡ булды. Йырсы Рәүилә Мәсәлимова "Йыл асышы" номинацияһында еңеүсе тип баһаланһа, шағирә Хәлисә Мөҙәрисова менән композитор Булат Йәнекәйев "Йыл йыры" призын яуланы. Тәрән мәғәнәле, иҫ киткес моңло был йыр Рәүилә Мәсәлимова ижадында яңы баҫҡыс булды һәм уны йыр иленә бөтөнләйгә алып инде. Бөтөнләйгә тиеүебеҙ шунан, сөнки Рәүилә һөнәре буйынса математика уҡытыусыһы. Ә йыр-моң йәштән үк, мәктәптә лә, институтта уҡығанда ла серҙәше, юлдашы була уның.

Рәүилә Дим буйында, бәләкәй генә Сирәш йылғаһы талғын Димгә ҡойған ерҙә урынлашҡан Сирәштамаҡ ауылында тыуып үҫкән. Ауылдарындағы башланғыс мәктәпте тамамлағас, күрше Боғҙан ауылында, артабан баш ҡалабыҙ Өфөләге интернат-мәктәптә белем ала. Аныҡ

фәндәрҙе үҙ итеүе уны Стәрлетамаҡ педагогия институтының физика-математика факультетына алып килә. Институтты тамамлағас, тыуған яғына ҡайта Рәүилә һәм Ҡанбәк мәктәбендә өс йыл математика фәнен уҡыта. Шулай ҙа ниндәйҙер яҙмыш һулышы уны Өфөгә әйҙәй. 1982 йылда Рәүилә баш ҡалаға юллана. Үҙе уҡыған 1-се интернат-мәктәпкә хәл белешергә, күрешергә тип инһә, эшкә беҙгә кил, тип саҡыралар. Рәүилә шатланып риза була һәм яратҡан мәктәбендә эш башлай.

— Өфөгә килгәс, әүҙем ижад донъяһына сумдым, — тип хәтерләй Рәүилә. — Етди фән — математика уҡытҡас, эштән һорап китеүе ҡыйыныраҡ булһа ла, төрлө мәҙәни сараларҙа йыш ҡатнаша инем. Әле Ҡанбәк мәктәбендә эшләгәндә беҙҙең Миәкә районы үҙешмәкәрҙәре Өфөгә ижади отчет менән килгәйне. Улар менән мин дә сығыш яһаным һәм ”Зөлхизә” тигән халыҡ йырын башҡарҙым. Шунда иғтибар иткәндәр, күрәһең, Өфөгә эшкә килеү менән мине Нефтселәр мәҙәниәт һарайында эшләп килгән музыкаль-фольклор студияға саҡырҙылар. Баянсы Ирек Баҡыев күп көс һалды был эшкә. Студияны йырсы Флүрә Ноғоманова етәкләй ине. Әйткәндәй, ундағы ҡурай түңәрәген Юлай Ғәйнетдинов алып бара торғайны, ул миңә байтаҡ халыҡ йырҙарын өйрәнергә ярҙам итте. Фольклор буйынса эште йәнләндереүгә ғалимә Розалия Солтангәрәева байтаҡ өлөш индерҙе. Ул осорҙа үҙешмәкәр артистар концерттар менән йыш сығыш яһай ине. Миңә лә Фәрит Бикбулатов, Иҙрис Ғәзиевтар менән бергә ҡатнашырға тура килде. Айырыуса халыҡ йырҙарын яратып башҡара торғайным. ”Мейәс буйы”, ”Абдрахман” кеүек йырҙар менән бергә композитор Роза Сәхәүетдинова ижад иткән йырҙарҙы айырыуса яратып йырлай инем. ”Пар балдаҡ”, ”Көмөшләнгән урман”, ”Ғүмер юлы”, ”Үҙең бүләк”, ”Һыңлап килдең” кеүек эстрада йырҙарын тамашасылар ихлас ҡабул итте.

Ул ваҡытта фольклор, тальян гармун бәйгеләре матур үтә торғайны. Ошо тамашаларға мине лә йыш саҡыралар ине. Миңә хатта популяр йырсыларҙың Өфөлә уҙған Бөтә Рәсәй эстрада бәйгеһен асып ебәреү бәхете тейҙе. Ошо сара өсөн бик матур махсус милли башҡорт костюмы тектергәйнеләр. Артабан ”Дуҫлыҡ” поезы составында Германияға барып ҡайттым. Бик күп танылған артистар менән бергә һәләтле үҙешмәкәр артистар ҙа бар ине делегация составында. Фәрит Бикбулатов, Флүрә Килдейәрова, Розалия Солтангәрәева, Ишмөхәмәт Ғәләүетдинов, Афарин Аҡсурин һәм башҡалар менән бергә сығыш яһаныҡ немец тамашасыһы алдында.

Эйе, ҡайҙа ғына бармаһын, яратып ҡаршы алалар Рәүиләнең сығыштарын, ҡабат-ҡабат һорап йырлаталар. Һабантуйҙарында, ҡала байрамдарында йыр-моңо менән ҡыуандыра ул. Әйткәндәй, уларҙың ғаиләләрендә бөтәһе лә йыр-моңға әүәҫ. Бәләбәй ҡалаһында йәшәгән һеңлеһе Миңлегөл Ғәзетдинова ла оҫта йырлай, Вәсимә апаһының да тауышы бик матур. Энекәштәре лә һыр бирергә яратмай.

Рәүиләне бер нисә тапҡыр филармонияға эшкә саҡыралар. Әммә йәштән уҡытыусы һөнәрен оҡшатҡан кеше булараҡ, артистар тормошон өнәп бөтөрмәй Рәүилә. Әлеге ”Гәлсәр һандуғас” бәйгеһенә лә осраҡлы рәүештә, үҙен һынап ҡарау ниәте менән килде ул. Сәмле булыу ярҙам итте үҙенә, еңеүгә өлгәште.

— ”Гәлсәр һандуғас”та башҡарған ”Ваҡыт” йырын минең Бәләбәйҙәге һеңлем Миңлегөл күптән йырлап йөрөй һәм ул миңә бик оҡшай ине,

— ти Рәүилә. — Ошо йырға өр-яңы аранжировка эшләттек. Матур ғына килеп сыҡты. Әммә бәйгелә бит бер генә йыр башҡармайҙар. Минең иҫке йырҙарҙы йырлағым килмәй. Шунан һеңлем мине Йәрмәкәйгә, үҙешмәкәр композитор Рәйес Ханнановҡа алып китте. Уның бик күп йырҙарын тыңлап ҡараныҡ. Ошо тиҫтәләгән йырҙар араһынан "Ултыртмағыҙ яңғыҙ ҡайын" йыры оҡшаны (Р.Миңнуллин һүҙҙәре). Артабан, үҙегеҙ беләһегеҙ, радио тыңлаусылар ҙа, телевизор ҡараусылар ҙа ихлас үҙ иткән йыр тыуҙы. Йырҙарымды халыҡ йылы ҡабул иткәнгә, отоп алғанға, ҡабат һорап йырлатҡанға үтә лә ҡыуанам, был миңә ҡанат ҡуя, дәртләндерә. "Гәлсәр һандуғас" лауреаттарын йыш ҡына төрлө ҡалаларға, район үҙәктәренә саҡыралар. Беҙ Нефтекама, Учалы, Баймаҡ, Стәрлетамаҡ ҡалаларында уңышлы сығыш яһаныҡ. Ике йыл эсендә ике альбом сығарҙым. Тәүгеһе "Ваҡыттарҙы булмай туҡтатып" тип атала, икенсеһе "Шишмәләргә ҡушылып йырланым" тип исемләнгән. Ике аудиоальбомға өс тиҫтәнән ашыу йыр тупланған. Октябрь айында DVD альбом донъя күрҙе.

Эйе, байтаҡ көс талап итә ижад эше. Матди сығымдар ҙа етерлек. Ярай хәҙер үҙҙәренең тауыш яҙыу студияһы бар һәм ул йырсының исеме менән "Рәүилә" тип атала. Был йәһәттән ғүмер юлдашы Альфред Мәсәлим улына рәхмәте сикһеҙ. Уңған эшҡыуар, сабыр һәм итәғәтле булыу менән бергә сәнғәтте лә ихлас ярата. Үҙе лә бер нисә музыка ҡоралында уйнай. Рәүиләнең йырҙарына аранжировка эшләгәндә лә кәңәштәре бик урынлы була. "Рәүилә" студияһы ла — уның хеҙмәт емеше, йыр иләндә йәшәгән Рәүиләһенә ҙур бүләге. Киләсәктә был студияның ҡыҙҙарына ла кәрәк булыуы бар. Икеһе лә йыр-моңдо үҙ итә. Әле өлкәне Гөлназ баш ҡалабыҙҙың Киров районындағы 144-се башҡорт гимназияһында — 11-се синыфта, Ләйсән 4-се синыфта тырышып уҡыйҙар.

Әлеге ваҡытта йырсы һирәк осрай торған халыҡ йырҙарын тамашасы күңеленә еткереү теләге менән бергә заманса йырҙар өҫтөндә лә әүҙем эшләй. Әйтәйек, Әнғәм Атнабаев һүҙҙәренә йәш композитор Азамат Йәғәфәров ижад иткән "Яҙҙар булһа" йыры мотлаҡ үҙ тыңлаусыларын табасаҡ.

Халыҡ йырҙарынан "Байсауыл" бик моңло яңғырай. Рәүилә уны Силәбе өлкәһендә йәшәгән Фатима Әхмәтшина репертуарынан алған.

— Фатима ханымдың йырҙары бик тә үҙенсәлекле, — ти Рәүилә. — Силәбе өлкәһе башҡорттарының йырҙарын яҡындан өйрәнеү теләге бар. Халыҡ йырын халыҡҡа еткереү — изге ниәт. Мин халыҡ йырҙарына ихтирамлы һәм һаҡсыл мөнәсәбәттә булғанды яратам. Һәр береһе фәһемле тарих бит улар. Быуаттар аша артылған, быуындан быуынға күсә килеп, халҡыбыҙҙың илаһи сафлығын, көслө рухын, ҡыйыулыҡ һәм ғорурлыҡ кеүек һоҡланғыс сифаттарын, күңелдәрҙе тетрәндерер хис-тойғоларҙы үҙенә туплаған был йырҙар. Булғандарын барлау, онотолоп барғандарын тергеҙеү — беҙҙең бурыс.

*Рәүилә Мәсәлимова Германияла сығыш яһай*



Бына шундай матур хыялдар менән йәшәй Рәүилә. Шуға ла юлдары уңыш һәм шатлыҡ менән тулы. Июль айында ”Гәлсәр һандуғас” бәйгеһе йондоҙҙары менән бергәләшеп Сибай ҡалаһында уңышлы сығыш яһағандар, халыҡ бик ихлас ҡабул иткән.

— ”Гәлсәр һандуғас” бик урынлы һәм ваҡытлы бәйге, — ти Рәүилә ханым. — Бик күп яңы исемдәрҙе асты ул. Айырыуса йәштәрҙең һәләтле, маҡсатҡа ынтылышлы булыуына һоҡланам. Моңдары классикаға әүерелгән Мәғәфүр Хисмәтуллин, Рамазан Йәнбәков, Фәриҙә Ҡудашева һәм башҡа маһир йырсыларға киләсәктә алмашҡа килерлек йәштәр булыуы ҡыуандыра. Тауыштары, моңдары бар, тимәк, артабан тырышып эшләргә, сәнғәт бейеклектәрен яуларға ҡала уларға.

Быйыл декабрь айында Рәүилә үҙенең күркәм юбилейын — 50 йәшен билдәләргә йыйына. Ошо айҡанлы көҙгө осорҙа Нефтекама, Октябрьский, Стәрлетамаҡ, Салауат, Дәүләкән ҡалаларында, Әлшәй, Миәкә тарафтарында гастролдә булып ҡайтты. Ижад кешеһе өсөн тынғылыҡ юҡ: яңы йырҙар әҙерләргә, уларҙы тамашасылар үҙ итерлек кимәлдә башҡарыу оҫталығына өлгәшергә кәрәк.

— Киләсәктә ретро йырҙарҙан шәлкем әҙерләргә ниәт бар, — ти Рәүилә. — Үҙемдең 80-се йылдарҙа йырлап йөрөгән байтаҡ йырҙарҙы барлаһаң, үҙе бер тамашалыҡ.

Рәүиләгә композиторҙар, авторҙар йырҙарын үҙҙәре тәҡдим итә, тимәк, ижад емештәренең яҙмышын уға ышанып тапшырыуҙан ҡурҡмайҙар.

— Композиторҙар сәйер халыҡ бит ул. Ҡайһы ваҡыт төн уртаһында шылтыратып аптыраталар, — тип йылмая Рәүилә. — Яңы йырҙарын мин башҡарып, тамашасы күңеленә еткереүҙе үтенәләр. Әммә бөтә тәҡдим ителгән йырҙарҙы ла йырлай алмағанымды аңлайым. Хәҙер бит йырсылар яңы йырҙарҙы композиторҙан һатып ала. Әлбиттә, быны бер ыңғай яғы бар: бер үк йырҙы бер нисә йырсы йырлап йөрөмәй. Иң мөһиме, күңелгә оҡшаған, үҙ тыңлаусыһын табырлыҡ йырҙарҙы һайлап алырға мөмкинлек бар. Шуны ла әйткем килә, миндә бәләкәйҙән тойомлау көслө. Әйтәйек, ҡайһы йырҙың популяр булып китәсәген, халыҡ күңелендә урын аласағын йырҙың көйөн, һүҙҙәрен ишеткәс тә тоям. Ҡайһы ваҡыт шулай ҙа була: тәү ҡарашҡа иҫ китерлек түгел кеүек йырҙың аҙаҡтан, аранжировка яһап әҙерләгәндән һуң, нисек буласағын тойомлайым, ошо мәлдә үк ул әҙер йыр булып ҡолағымда яңғырай. Шулай ҙа гастролдәргә сығыр алдынан борсоулы уйҙар солғап алғылай. Хәҙер бит эстрадала шау-шыулы, ҡайһы ваҡыт үтә ”дәртле” йырҙар күбәйҙе. Йәш йырсыларҙың эргәһендә күбәләктәй бөтөрөлөп йөрөгән бейеүселәре лә етерлек. Йыш ҡына улар сәхнәгә сығып өлгөрмәй, халыҡ ҡул саба башлай. Ә минең репертуарҙы нигеҙҙә боронғо халыҡ йырҙары, лирик йырҙар тәшкил итә. Мин тамашасыны моңом менән йәлеп итергә тейешмен. Йырҙарымдың күбеһе етди тыңлаусыларға иҫәпләнгән. Йыр ялҡытмаҫҡа, арытмаҫҡа тейеш.

Йырсы йыр менән, йырҙарында йәшәй. Тамашасыһын, тыңлаусыһын тапҡан йыр дәртләндерә, ҡанат ҡуя. Рәүилә лә шулай. Үҙенә генә хас моңо, үҙенсә итеп башҡарған матур йырҙары менән халыҡ күңелендә урын алған ул. Йырсыға ла ғүмер бер бирелә, ғүмер ваҡыт арбаһында елә, ә ваҡытты туҡтатып булмай. Республикабыҙҙың Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге премияһы лауреаты Рәүилә Мәсәлимованың йырҙары быны асыҡ раҫлай.